

ДАН ОРДЕНДАРЫНЫҢ ТУЛЫ КАВАЛЕРЫ,
ҠАҺАРМАН ЯҠТАШЫБЫҘ
***ӘҘЕҺӘМ***
***ӘЛИБАЕВҠА***
ДАН!

- Әҙеһәм Ғәле улы Әлибаев Башҡортостан Республикаһының Баймаҡ районы Йомаш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә 1925 йылдың 12 майында доньяға килә. Ул 1933 йылда уҡырға төшә. Ун дүрт йәшендә буласаҡ батыр һәм педагог Муллаҡай ете йыллыҡ мәктәбе директоры булып эшләгән ағаһына күсеп бара һәм бында 7 синыфты тамамлай. Бәләкәйҙән үк уҡытыусы булырға хыялланған үҫмер 1940 йылда Темәс педагогия училищеһына уҡырға инә. Ләкин егеткә был уҡыу йортон бөтөрөп сығырға насип булмай.

**Утлы көрәш йылдары.**

Бөйөк Ватан һуғышының иң ауыр мәлендә, 1943 йылдың ғинуарында, училищеның 3 курсында уҡып йөрөгән Әҙәһәм Әлибаев хәрби хеҙмәткә алына. Тәүҙә ул ҡыҫҡа сроклы элемтәселәр мәктәбен бөтөрөп сыға, шунан һуң 3-сө гвардия танк армияһының  9-сы механизацияланған корпусы составына ингән 616-сы айырым миномет полкының 4-се батареяһында идара итеү взодының телефонсыһы вазифаһында хәрби хеҙмәтен башлай, һуғыштың аҙағынаса ошо часта телефонсы һәм разведчик була. Әҙеһәм Әлибаев 1-сы Украина фронтының 3-сө гвардия танк армияһы составында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы батыр һуғыша, Германияны, Чехословакияны һәм уларҙың баш ҡалалары Берлин менән Праганы азат итеүҙә ҡатнаша,  дошман менән үҙен аямайынса алышҡан батыр бер нисә тапҡыр яралана, контузия ала. Ләкин һәр ваҡыт ялан госпиталендә төҙәлеп сыға, сафҡа баҫа. Әҙәһәм Әлибаевтың һуғышта күрһәткән тиңдәшһеҙ батырлыҡтары үҙ взводында ғына түгел, шулай уҡ бөтә 1-се Украина фронты яугирҙарына билдәле була.

# 3-сө дәрәжә Дан ордены

- ...Әҙәһәм Әлибаев хеҙмәт иткән 616-сы миномет полкы 1944 йылдың авгусында Польшаның бер бәләкәй генә ауылы эргәһендә яңы позиция яулап ала. Тәреле танкылар һәм уларға ышыҡланған фашистар күҙҙе асырға ла ирек бирмәй. Хәлдең киҫкенләшеүен күреп, полк командиры сигенергә, яңы позицияға күсергә һәм унда оборонаны яҡшыраҡ ойошторорға бойороҡ бирә. Минометсылар бер-береһен дошман утынан ҡаплай-ҡаплай сигенәләр.Ҡыҙыу алыш барған мәлдә һуғышсылар әүәлге позицияла яралы бер яугирҙың ятып ҡалғанлығын абайламай ҡалдырып китәләр. Яралы яугир янына бына-быны гитлерсылар килеп етәсәк, ҡотҡарыу мөмкин түгел, өлгөрөп булмаясаҡ? Әҙеһәм Әлибаев яралы яугирҙы иптәштәреунә тапшырыуы була, тап шул минута яҡында ғына шартлап ярылған снаряд уңың үҙен ергә ҡуша һуға. Әҙеһәм ауыр контузия ала. 1944 йылдың 26 авгусында был батырлығы өсөн 3-сө дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнә.

# 2-СЕ ДӘРӘЖӘ ДАН ОРДЕНЫНА

- Гайденбург исемле бәләкәй генә ҡаланы яулап алыу өсөн киҫкен һуғышта батарея менән дивизиондарҙың береһе араһында элемтә өҙөлә, Әҙеһәм: «Телефон кабелы ҡайҙалыр яҡында ғына өҙөлгәндер,» - тип уйлап бер үҙе тикшерергә китә. Ярты километр самаһы юл үтеүгә, фашистар төркөмен күреп ҡала. Дошманды көтөлмәгән ут менән ҡаршыларға була. Ул эргәһендәге канауға йәшеренеп гитлерсыларҙың яҡынлашыуын көтә. Аралыҡ 100 аҙымдар самаһы ҡалғас, автомат тәтеһенә баҫа. Көтөлмәгән уттан фашистар ҡаушап ҡала, Әлибаев немецтар үҙенең яңғыҙлығын һиҙмәһен өсөн, ҡысҡырып командалар бирә башлай. Көслө атыш башлана. Был миномет подразделениелары өсөн сигнал була. Ярҙамға килеп өлгөргән минометсылар фашистарҙың ҡалғанын юҡ итә. Шулай итеп, Әлибаев линия ла өҙөлгән сымды табып ялғай, әммә дошмандың тағы бер снарядыы гөрһөлдәп ярылыуҙан иҫен юғалта. Байтаҡ ваҡыт дауаланғас, ҡыйыу егет йәнә сафҡа баҫа. Берлинда урам һуғыштарында ҡатнаша, шунда күрһәткән батырлығы өсөн 1945-се йылдың 30 апрелендә 2-се дәрәжә Дан орденына лайыҡ була.

# 1-СЕ ДӘРӘЖӘ ДАН ОРДЕНЫНА

- Берлиндан уларҙы Чехославакияға ебәрәләр. Унда иҫ киткес ауыр алыштарҙа башҡорт егете юлында осраған барлыҡ ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыҡҡан батыр итеп таныта. Һуғыш тамамланғандан һуң уның күкрәгенә бронза, көмөш йондоҙҙар янына Дан орденының 3-сө алтын йондоҙон тағалар. 1-се дәрәжә Дан орденына 1945 йылдың 27 июнендә лайыҡ була. Ул шулай уҡ "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән дә бүләкләнә.Тыуған ауылына батыр егет орден-миҙалдар тағып ҡайтып төшә.

# ҺУҒЫШТАН ҺУҢҒЫ ТОРМОШ ЮЛЫ

- 1946 йылда Муллаҡай ауылына әсәһе янына ҡайта. Үҙенең яратҡан һөнәре буйынса уҡытыусы эшенә тотона.1948 йылда Темәс педагогия училищеһын тамамлай, 1949 йылда Магнитогорск уҡытыусылар институтына ситтән тороп уҡырға инә. Муллаҡай ете йылыҡ мәктәбе уҡытыусыһы Әҙеһәм Ғәле улы Әлибаев балаларға тарих, СССР Конституцияһы буйынса төплө белем бирә, улар менән физик культура һәм һыҙма дәрестәрен дә алып бара. Был эштәрҙе уҡытыусы күңелен биреп, ихлас башҡара.

- 1951 йылдың 12 августа егерме етенсе йәше менән генә барған ҡаһарман, Муллаҡай мәктәбе директоры Әҙеһәм Әлибаев вафат була.

# БЕР КЕМДӘ, БЕР НӘМӘ ЛӘ ОНОТОЛМАЙ.

- Һуғыш батыры, Дан ордендарының тулы кавалеры, яҡшы эштәр башҡарып өлгөргән Әҙәһәм Ғәле улы Әлибаевтың исеме онотолмай. Тыуған яғында уның иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлайҙар. 1965 йылдың 20 майында Әҙеһәм Әлибаевҡа 40 йәш тулыу айҡанлы, Муллаҡай ауылында уның ҡәберенә таҡтаташ ҡуйылды. 1989 йылда Йомашта бюст ултыртылды, 2015 йылда Муллаҡай мәктәбендә тактаташ куйылды. Ҡолсора урта мәктәбенең пионерҙар ойошмаһы уның исемен йөрөтә һәм Баймаҡ ҡалаһында, Йомаш ауылында, Муллаҡайҙа Әлибаев исемендәге урамдар бар.